*Сәлимйән ҒҮМӘРОВ*

# Хеҙмәтенә күрә хөрмәте

Көнө буйы ниндәй генә мәсьәләләр менән мөрәжәғәт итмәйҙәр Әлшәй районы хакимиәте башлығының социаль мәсьәләләр буйынса урынбаҫары Закуан Зөфәр улы Әхмәтовҡа. Кемдеңдер өйө һыуыҡ, утыны бөткән, икенсеһенең бесән яғы наҡыҫ, өсөнсөһөнөң пенсия мәсьәләһен хәл итергә кәрәк. Мәғариф, һаулыҡ һаҡлау, мәҙәниәт вәкилдәре лә йыш килә: мәктәптең ҡыйығы туҙған, класҡа компьютер кәрәк, китапханала һалҡын, ауырыуҙар өсөн теге йәки был дарыу юҡ. Милиция хеҙмәткәрҙәренең үҙ мәшәҡәте: тегендә авария, бында эсеп руль артына ултырғандар һәм башҡалар.

Тормошобоҙҙоң, бөгөнгө иҡтисади, сәйәси, социаль хәлебеҙҙең асыҡ сағылышы булған бихисап ихтыяж, үтенес, зар, проблема. Етәксе булараҡ, һин һәр бер һорауҙы, ҡағыҙға төшкән үтенесте ғәҙел хәл итергә, кәңәшең, яҡты йөҙөң һәм яҡшы һүҙеңде йәлләмәҫкә тейешһең...

— Көнөм шулай башланып китә лә, төнгә барып тоташа, — тип йылмая Закуан Зөфәр улы үҙенә генә хас ихлас ҡәнәғәтлек менән.



*Закуан Зөфәр улы Әхмәтов*

Асылынан асыҡ, егәрле һәм кешелекле булғанлыҡтан, уға ошолай йәшәү оҡшағанлығы килеш-килбәтенән, ҡиәфәтенән үк күренеп тора.

— Бөтәбеҙ ҙә әҙәм балалары бит, яҡшылыҡҡа, киләсәккә ышанып йәшәйбеҙ. Өҫтәлдә ятҡан һәр ҡағыҙҙа — кеше яҙмышы, бында ингән һәр кемдә — йәшәү өмөтө. Бөтәһен дә ентекләп тыңлап, тикшереп, ғәҙел хәл итергә тырышам, шуға ғәҙәтләнгәнмен.

Бер ни ҙә әйтеп булмай — хаҡ һүҙҙәр. Мин кабинетта ултырғанда ғына ла әллә нисәмә тапҡыр телефон шылтыраны: Өфөнән

отчет талап итәләр, ауылдарҙа юл юҡ тип хафалананалар, район үҙәгендә тоҙ юҡлыҡҡа борсолалар һәм башҡалар. Етәксе береһен дә яуапһыҙ ҡалдырмай.

Тағы бер нәмәгә ғәжәпләндем. Өфөнән шылтыраталар. Ниндәйҙер баҫманың баш мөхәррире үҙенең үпкә һүҙҙәрен белдерә. Шул арала Закуан Әхмәтов йөҙ ҡағыҙ араһынан матбуғатҡа яҙылыу мәғлүмәттәрен алды. Был документ уның күҙ алдында ята.

— Хөрмәтлем, — тине ул, — һеҙҙең мәғлүмәт бик иҫке, бөгөнгө һандар буйынса һеҙҙең баҫмаға яҙылыу күпкә яҡшыраҡ.

Ғөмүмән, матбуғатҡа яҙылыу, уны контролдә тотоу буйынса ни тиклем теүәл һәм етди эшләгәнен үҙем һынап беләм. Ул — матбуғаттың яҡын дуҫы. Шул арала хәстәрлекле етәксе мәктәптәргә, клубтарға, ауыл хакимиәттәренә, китапханаларға шылтыратып, хәлде һорашып сыҡты.

— "Башҡортостан"ға яҙылыу һәйбәт бара, "Ҡыҙыл таң" әҙерәк, "Өмөт"төң хәлдәре шәп, "Йәшлек" әлегә самалы, — тип үҙ фекерен белдерә барҙы. Хатта имтихан да үткәреп ҡуя: "Шул гәзиттә беҙҙең турала ниҙәр яҙылған?" Әлбиттә, алдына ошо һорау ҡуйылған кеше уҡымаған булһа, бик уңайһыҙ хәлгә ҡала. Был шуны күрһәтә, хатта ошондай тығыҙ тормош барышында ла Закуан Әхмәтов матбуғат баҫмалары менән танышып барырға форсат таба. Һәр матбуғат сараһына ҡарата үҙ фекерен әйтеүҙән дә тартынмай. Берәү менән һөйләшкәндә: — Туғанҡайым, беҙ подписканы тырыштырырбыҙ ул. Һеҙ ҙә саралар күрегеҙ, баҫманы тормошсан, ҡыҙығыраҡ, халыҡ уҡырлыҡ итеп сығарығыҙ. Ул саҡта беҙҙең тырышыуыбыҙ ҙа кәрәкмәҫ, — тип ебәрҙе.

Хәтерләй башлаһаң, уның менән танышыуыбыҙға ике тиҫтә йылдан артығыраҡ ваҡыт үтеп киткән. Ул осорҙа Закуан Зөфәр улы Әхмәтов Ҡыпсаҡ-Асҡар мәктәбендә директор булып эшләй ине. Уҡытыуҙы кабинет системаһына күсереү бара. Икәүләшеп йөрөп, мәктәп ихатаһынан алып, бөтә кабинеттарға тиклем ентекләп ҡарап сыҡтыҡ. Мәктәптең педагогик коллективы менән осрашып, уҡытыу-тәрбиә темаһына оҙаҡ ҡына һөйләшеп ултырҙыҡ. Тирәяҡтағы бөхтәлек, таҙалыҡ, йәшеллек һәр баланың күңелен тартып торалыр, тип уйланым. Уҡытыу кабинеттары заман талаптарына ярашлы ҙур зауыҡ менән йыһазландырылған. Педагогик коллективтың эш тәжрибәһен бер нисә тапҡыр "Башҡортостан уҡытыусыһы" журналында яҡтыртып, республика уҡытыусыларына еткерҙек.

Ғөмүмән, 90-сы йылдарҙа Әлшәй районында мәғарифты үҫтереүгә, уҡытыу-тәрбиә эшен камиллаштырыуға, яңы ысулдар һәм мөмкинлектәр эҙләүгә ғәйәт ҙур иғтибар бирелде. Тырышлыҡ һөҙөмтәһеҙ үтмәне, әлбиттә. 1997 йылда Әлшәй районы мәктәптәре базаһында тәүгеләрҙән булып Президентыбыҙ Мортаза Рәхимов ҡатнашлығында мәғариф буйынса республика кәңәшмәһе үтте. Унда президент аппараты, БР-ҙың Министрҙар кабинеты хеҙмәткәрҙәре, министрҙар, ҡала һәм район ха-

кимиәттәре башлыҡтары, ғалимдар, юғары уҡыу йорттары ректорҙары һәм директорҙар, йәмәғәтселек вәкилдәре ҡатнашты. Мәктәптәр, колхоз-совхоздар, ойошмалар һәм предприятиелар бөтәһе лә бик һәйбәт әҙерләнгән ине.

Кәңәшмә үткәс тә райондың тәжрибәһен өйрәнеү маҡсатында төрлө ҡалаларҙан, райондарҙан мәктәп коллективтары, директорҙар, айырым фәндәр буйынса уҡытыусылар ағымы туҡталманы. Юғары кимәлдә үткәрелгән был кәңәшмә республика мәғарифын үҫтереү өсөн ҙур этәргес көс булып торҙо.

Закуан Әхмәтов районда мәғариф бүлеге етәксеһе булып эшләгәндә мәктәптәр өр-яңы һулыш алды. Райондың белем һәм тәрбиә биреү учреждениелары "Матур мәктәп" тип аталған халыҡ-ара хәрәкәттә әүҙем һәм ышаныслы ҡатнаша башланы. 1997—1999 йылдарҙа "Матур мәктәп" конкурсы Санкт-Петербург, Өфө, Сочи ҡалаларында үткәрелде. Унда Рәсәйҙән, БДБ илдәренән йөҙәрләгән мәктәп, балалар баҡсалары ҡатнашты. 1999 йылда Сочи ҡалаһында үткәрелгән конкурста Рәсәйҙән һәм сит илдәрҙән 150 учреждение көс һынашты. Унда Әлшәйҙең Пионерҙар һәм уҡыусылар һарайы 1-се дәрәжә дипломға лайыҡ булды. Һарай, Сурай, Зеленый Клин, Яңы Сәпәш, Ибрай мәктәптәре һәм байтаҡ ҡына балалар баҡсалары дипломант исемен алып ҡайтты. Ғөмүмән, район мәктәптәре "Ерҙә ожмах юҡ, ләкин ожмах кеүек мөйөштәр бар", "Матур мәктәп — сәләмәт мәктәп", "Мәғариф учреждениелары — сәләмәт социаль организм", "Хеҙмәт мәктәбе", "Тере тәбиғәт утрауы" һәм башҡа номинациялар буйынса 1-се, 2-се, 3-сө дәрәжә дипломдарға эйә булып, дәртләндереү бүләктәре алып ҡайтты.

Ошондай конкурстың Әлшәй районында уҙғарылыуы һис тә осраҡлы хәл түгел ине. Был конкурс "Әлшәй варианты" девизы аҫтында үтте, Рәсәйҙән күп кенә мәктәп вәкилдәре, ғалимдар ҡатнашты. Ҡуйылған проблема ла бик тормошсан ине. Баланы тәрбиәләүҙә ата-әсәнең роле, хеҙмәт тәрбиәһен көсәйтеү, ата-әсәләрҙең белемен күтәреү һәм улар өсөн уҡыуҙар, консультациялар ойоштороу мәсьәләләре ҡаралды.

Шул саҡта Әлшәй районында тағы бер яңылыҡҡа осрап, ғәжәпкә ҡалдым. Уҡытыусылар "Белем алыуҙың, үҙ-үҙеңде камиллаштырыуҙың сиге юҡ" тигән девиз ҡабул иткән. Район хакимиәте, мәғариф бүлеге юғары уҡыу йорттарын тамамлаған һәм белемдәрен аспирантурала дауам итергә теләгәндәрҙең исемлеген алған. Ошо мөмкинлектән файҙаланып, байтаҡ белгестәр белемдәрен арттырҙы, ҡайһы берәүҙәр кандидатлыҡ диссертациялары яҡланы.

Закуан Әхмәтов ысын мәғәнәһендә тынғы белмәй, яңылыҡтар эҙләй торған кеше булды һәм шулай булып ҡала. Әле кемдер тормошонан ҡәнәғәтлек белдерә, ә бәғзеләр йәшәү ауырлашыуына ишара яһай. Тормош, донъя көтөү бер ҡасан да еңел булмағандыр. Һәр замандың үҙенә генә хас проблемалары була. Хатта мәға-

риф тормошонда ғына ла күпме реформалар, эксперименттар үткәрелде. Заман талаптарына яуап бирә алмаçтайҙары көн тәртибенән төшә ҡалды. Тормошҡа ашырылған ыңғай тәжрибәләр йәһәтенән, минеңсә, Әлшәй районы зарлана алмаç. Бигерәк тә социаль йәһәттән.

Күптән түгел район үҙәге эргәһендә ипподром төҙөнөләр. Юртаҡ аттар ҙа тәрбиәләй алдылар. Баласаға ихлас күңелдән шунда ынтыла хәҙер. Ат ҡарау, уны иркәләү, ашатыу һәм эсереү бигерәк тә ир балалар өсөн оло ҡыуаныс. Ошо ипподромда быйыл Рәсәй күләмендә моторлы саналарҙа уҙышыу ярышы үтте. Был район ғына түгел, бөтә республика халҡы өсөн оло байрам булды.

Закуан Зөфәр улы быуындар бәйләнешен нығытыу, районда һәм ҡалала йәшәгән ерҙәштәренең дуçлығын нығытыу буйынса ла төрлө саралар күрә. Быға Өфө ҡалаһында үткәрелгән ”Әлшәй йондоҙҙары” кисәһе асыҡ миçал. Бында Әлшәйҙән сыҡҡан арҙаҡлы шәхестәр, дәүләт эшмәкәрҙәре, артистар, яҙыусылар, шағирҙар, уҡытыусылар, врачтар, эшселәр һәм ауыл хеҙмәтсәндәре бер ғаилә кеүек аралашты, фекер алышты, райондың киләсәген үçтереү буйынса кәрәкле тәкдимдәр әйтелде.

Республикабыҙ оло тарихи ваҡиға алдында тора — 2007 йылда Башҡортостандың үҙ ирке менән Рәсәй дәүләтенә ҡушылыуына 450 йыл тула. Был ҙур байрам Рәсәй күләмендә үткәреләсәк. Халыҡта матур йола бар: байрамға әҙерлек алдан уҡ башлана. Әлшәй районында, мәçәлән, Спорт һарайы, Мәҙәниәт һарайы төҙөкләндерелеп, яңыса төç алған. Башҡорт лицейы райондың күрке булып тора. Закуан Әхмәтовтың әйтеүенә ҡарағанда, социаль яҡтан районда байтаҡ эштәр башҡарыла, әммә эшләйһеләре тағы ла күберәк. Донъя шулай ҡоролған: тормош алға барған һайын, ихтыяждар арта, талаптар үҙгәрә.

Закуан Зөфәр улы яҡшы ойоштороусы, һәләтле етәксе генә түгел, уңған, иғтибарлы ғаилә башлығы ла. Ҡатыны Долорес менән ике ул үçтерҙеләр. Улар ҙа тормошта үҙ юлдарын һайлаған, атай-әсәйҙәренә ярҙам итеп торалар.

Ейәнсура районында йәшәгән ҡайныһы менән ҡәйнәһе икеһе лә хеҙмәт ветерандары, кейәүҙәренән ифрат ҡәнәғәт.

— Хоҙайға шөкөр, кейәүҙән шул тиклем уңдыҡ, иçәнлек-һаулыҡ ҡына теләйбеҙ, — тип маҡтай уны ҡайныһы Һиҙиәт Ҡыуатов. — Алыç булыуға ҡарамаçтан, беҙгә лә ярҙам итергә өлгөрә. Ҙур рәхмәт инде уға.

Ата-әсәңдең рәхмәтен, яҡташтарыңдың хөрмәтен тойоп, балаларыңдың изгелеген күреп йәшәүҙән дә ҡәҙерлерәк нимә бар кеше өсөн?